**29. 11.10. Технология. 2-4 класс. Тема. Әсәйемә бүләгем.**

**Маҡсат.** 1. Уҡыусыларҙы Әсәләр көнө байрамы менән таныштырыу, изонить алымы менән бүләк-открытка эшләү.

2. Уҡыусыларҙың ҡатырғаны киҫеү, тегеү күнекмәләрен нығытыу, изонить алымы менән түңәрәк тултырырға өйрәтеү, хәүефһеҙлек ҡағиҙәләрен ҡабатлау.

3. Ижади эш төрөнә ҡыҙыҡһыныу уятыу, ижади ҡараш тәрбиәләү.

**Йыһазлау.** Өлгөләр, хәүефһеҙлек ҡағиҙәһенә һүрәттәр, ҡатырға,төҫлө еп, энә.

## Дәрес барышы.

### I. Ойоштороу моменты.

- Уҡыусылар бөгөнгө дәрескә нимәләр килтерергә тейеш инегеҙ? (ҡатырға, ҡайсы, төҫлө еп, энә) Дәрескә барығыҙҙа әҙерһегеҙме? Дәрескә кәрәк буласаҡ инструменттарҙы нисек урынлаштырыр инегеҙ?

### II. Теманы асыҡлау.

- Һеҙгә йомаҡ алып килдем, кем тураһында икән?

Ул мине ярата,иркәләй, һөйә, наҙлай,<br>Өйрәтә төрлө эшкә, һөнәрем арта шулай. (Әсәй)

### III. Әңгәмә.

- Һеҙ әсәйҙәрегеҙҙе яратаһығыҙмы? Ә яратҡан кешегә байрамдарҙа бүләк биреү – оло ихтирам билдәһе ул. Ниндәй байрам яҡынлашып килә? (Әсәләр көнө) Әсәләр көнө РФ президенты В.В. Путин указы менән 1998 йылдан билдәләнелә. Һәр йыл һайын ноябрь айының һуңғы йәкшәмбеһе байрам итеп иғлан ителгән. Быйыл да әсәләр көнөн билдәләп үтәсәкбеҙ. Бөгөнгө дәрестә тик әсәләр өсөн бүләк-открытка эшләйәсәкбеҙ.

IV. **Эште аңлатыу.**

- Бүләгебеҙ изонить алымы менән эшләнгән открытка буласаҡ. Изонить тип ептәр менән һүрәтләү атала. Уны иң беренсе Англия туҡыусылары уйлап сығарған. Улар тәүҙә таҡтаға ҡаҙаҡтар ҡағып, ептәрҙе билдәле бер тәртиптә сиратлап теҙеп сыҡҡан. Һөҙөмтәлә селтәрле әйберҙәр барлыҡҡа килгән. Хәҙерге ваҡытта ошо ысул менән төрлө ҡотлау открыткаларын, сувенирҙарҙы, китап билдәләрен, декоратив панноларҙы, хатта кейемдәрҙең ҡайһы бер өлөштәрен биҙәйҙәр. Изонить алымын ҡулланып матур әйберҙәр эшләү өсөн ике төп эште – өсмөйөштө һәм түңәрәкте тултырыуҙы белергә кәрәк.

**V. Өлгөгә анализ.**

- Бөгөнгө дәрестә түңәрәкте тултырыу алымы менән йөрәк формаһындағы ҡатырғаны тултырасаҡбыҙ. Бының өсөн:
- ҡатырғаға шаблонды һыҙып, киҫеп алабыҙ;
- әҙер форманы ситенән 1 см ҡалдырып икенсе йөрәк һыҙабыҙ;
- һыҙыҡ буйлап тигеҙ өлөштәргә бүлеп сығабыҙ;
- нөктәләр урынын энә менән тишәбеҙ;
- энә һабаҡларға;
- эште А нөктәһенән башларға,
- уң яғынан 13 тишек ҡалдырып тегәбеҙ;
- йөрәкте тултырып бөткәс, ҡотлау һүҙҙәре яҙырбыҙ;







-

- Эш барышында ниндәй ҡоралдар ҡулланырбыҙ?(Энә, ҡайсы) Хәүефһеҙлек ҡағиҙәләрен иҫкә төшөрәйек. Ошо һүрәткә ҡарап ниндәй ҡағиҙә әйтерһегеҙ? (Энә энә сәнскестә генә торорға тейеш, ә ҡайсы ҡулланылмаған ваҡытта асыҡ ятырға тейеш түгел)






**VI.Практик эш.**

Үҙ аллы эш башлау. Кәрәк саҡта ярҙам итеү.Беҙҙең эштәребеҙ матур сыҡһын өсөн ептәрҙе ныға раҡ тарттырыға, энәне кәрәкле тишеккә генә ҡазарға, иғтибарлы булырға кәрәк.

**VII. Йомғаҡлау.**

- «Тырышҡан ташҡа ҡаҙаҡ ҡаҡҡан» тип әйтелә халыҡ мәҡәлендә. Бик матур эштәр килеп сыҡты. Әсәйҙәребеҙгә иң йылы, иң матур ҡотлау һүҙҙәрен яҙып эште тамамлап ҡуяйыҡ. Шула итеп, изонить алымы менән нимәләр эшләргә була? Ниндәй ҡағиҙәләрҙе иҫтә тоторға кәрәк?

**VIII. Эш урынын тәртипкә килтереү.**







Байрам менән әсәй!